# НАМАЗ КИТАБЫ

## РӘСЕМДӘРЕ МЕНӘН

Ильшат хәҙрәт Хафизи

# НАМАҘ КИТАБЫ

## РӘСЕМДӘР МЕНӘН

ДӘҒҮӘТ НӘШРИӘТЕ

# Мөҡаддәмә

Намаҙ – Аллаһ Тәғәләгә билдәле рәүештә күңел һәм тән аша ғибәҙәт (ҡоллоҡ) ҡылыу тиміәктер. Имандан һуң иң сауаплы ғибәҙәт - намаҙ уҡыуҙыр.

Һәр бер мөьмин кешегә һәр тәүлек эсендә 5 ваҡыт намаҙ уҡыу фарыздыр: иртә, өйлә, икенде, аҡшам һәм йәстү намаҙҙары.

Намаҙ уҡыу - ҡәберҙә нур һәм юлдаш, Мөнкир һәм Нәкир фәрештәләренә яуап, мәхшәр көнөндәге эҫелектән күләгәләр, тамуҡ утынан пәрҙәлер, сират күперендә етәкселер һәм ожмахтың да асҡысылыр. Иң беренсе Ҡиәмәт көнөндә һораласаҡ нәмәбеҙ намаҙҙыр. Намаҙ – диндең терәгелер, мөьминдең нурылыр. Намаҙ уҡыған кешенең күңеле тыныс, доғаһы ҡабул булыр, ризығында бәрәкәт һәм тәнендә сәләмәтлек булыр. Китабыбыҙҙан файҙа күрергә насип булһын. Был китап тәү башлап динебеҙгә аяҡ баҫыусыларға тәғәйенләнгән. Беҙгә иһә хәер-доғаларығыҙҙы ирештереп торһағыҙ беҙ теләгәнебеҙгә ирешкән булырбыҙ.

Изге ғәмәл намаҙ менән генә,
Ысын тәүбә лә намаҙлыҡтан.
Хаҡ намаҙ торғоҙһаң ғына,
Тыйылырһың боҙоҡлоҡтан.

Намаҙ менән Аллаһҡа яҡынлығың арта,
Намаҙ эсендә ул Аллаһ менән һөйләшә.
Намаҙ менән генә йән рәхәтлек таба,
Намаҙ арҡаһында Аллаһ менән рух серләшә.

Ҡараңғылыҡтан нурға сығарыусы ҡорал
Уҡыған намаҙыңдыр.
Хаҡ намаҙ уҡыусы булһаң,
Күңел күҙең яҡтырыр.

**Ильшат хәҙрәт Хафизи**

**Хөрмәтле ғәзиз ҡәрҙәштәрем!**

Намаҙ уҡыусы булһаҡ, Аллаһтың ниғмәттәренә түләп ашауыбыҙ, түләп йәшәүебеҙ була.Әгәр ҙә намаҙ уҡымаһаҡ, буш ашаусы, буш йәшәүсе булабыҙ. Шуның өсөн, ғәзиз ҡәрҙәштәрем, намаҙға иғтибарлы булайыҡ.

Намаҙ уҡыясаҡ кешегә тәне, кейеме һәм урыны һәр төрлө нәжестәрҙән таҙа булыу кәрәктер һәм шәриғәт бойорған рәүешсә һыу менән тейешле ағзаларҙы йыуып, тәһәрәт алыу фарыздыр.

## Тәһәрәт.

Тәһәрәт алғанда ошо 8 төрлө эш ҡылыналыр:

1.Тәһәрәт аласаҡ кеше таҙа һыу менән тәүҙә истинжа ҡылыр, йәғни ғәүрәттәрен нәжестән таҙартыр.

2.Унан һуң ҡул суғына ҡәҙәр(беләҙек) 3 тапҡыр ике ҡулын йыуыр.

3. Унан һуң 3 тапҡыр ауыҙын йыуыр.

4.Унан һуң 3 тапҡыр танауын йыуыр.

5.Унан һуң 3 тапҡыр йөҙөн йыуыр.

6.Унан һуң 3 тапҡыр терһәктәренә ҡәҙәр ике ҡулын йыуыр.

7.Унан һуң устарын һәм бармаҡтарын һыуға тейҙертеп, ике ҡулы менән тәүҙә башына, һуңынан ҡолаҡтарына, һуңынан муйынына мәсих ҡылыр.

8.Унан һуң шайтанашыҡҡа(щиколотка) ҡәҙәр 3 тапҡыр ике аяғын йыуыр.

Йөҙөн йыуғанда маңлайындағы сәс турыһынан алып, ике ҡолағына һәм эйәк аҫтына ҡәҙәр булған һәр еренә һыу тейҙерер.Ҡашҡа һәм һаҡалдың эйәк турыһындағы төктәренә лә һыу тейҙерер.

Ҡулдарын һәм аяҡтарын йыуғанда бармаҡ араларына, йөҙөк аҫтына һыу тейҙермәй ҡалмаҫ. Терһәктәрен һәм шайтанашыҡтарын да йыуыр. Әгәр ҙә аяҡтары ситекле булһа, ситектәрененң йөҙөнә ҡәҙәр өс бармаҡ ҡәҙәр мәсих ҡылыр.

## Ғөсөл.

Ғөсөл - бөтөн тәнде йыуып ҡойоноуҙыр.

Ғөсөл ҡыласаҡ кеше

1)тәүҙә истинжа ҡылып ғәүрәттәрен таҙартыр;

2)унан һуң ҡул суғына ҡәҙәр 3 тапҡыр ике ҡулын йыуыр;

3)унан һуң тәһәрәт алыр, ләкин был тәһәрәттә аяҡтарын йыумаҫ;

4)унан һуң тәүҙә башына, һуңынан башҡа ерҙәренә һыу ҡойоп, тәненең һәр бер еренә бер ҡат һыу тейҙерер;

5)унан һуң мөмкин ҡәҙәр тәненең һәр ерен ҡулдары менән бер ҡат ышҡып сығыр;

6)унан һуң тағы икенсе ҡат тәненең һәр еренә һыу ҡойор;

7)унан һуң тағы тәненең һәр ерен һыулатыр.

8)унан һуң ике аяғын йыуыр.

Ғөсөл ошолор. Ғөсөллө кеше камил(тулыһынса) тәһәрәтле булалыр.Намаҙ уҡыу өсөн ғөсөлгә тәһәрәт алыу ләзем(тейеш) түгелдер.

## Ғөсөлдөң фарыздары.

Был ғәмәлдәрҙе ҡылмаған кешенең ғөсөлө булмаҫ үә намаҙы дөрөҫ булмаҫ. Ғөсөлдөң фарыздары 3-төр:1)ауыҙ эсен йыуыу; 2) танау эсен йыуыу; 3) тәндең һәр еренә һыу тейҙереү. Ғөсөлдө тәндең тышҡы яғының һәр еренә һыу тейҙереү өсөн сәс, ҡаш, мыйыҡ һәм һаҡал кеүек һәр бер төктәргә лә, һәм ул төктәрҙең аҫтарындағы тәнгә, һәм күҙ соҡоро кеүек эскә батып, йәки йыйырылып торған ерҙәргә лә, йөҙөк аҫтына һәм ҡалған ерҙәргә лә һыу тейҙереү

тейешлелер. Ирҙәргә сәстәренең һәр бер бөртөктәренә һыу тейҙереү фарыздыр. Әммә ҡатын-ҡыҙҙарҙың сәстәренең төбөнә һыу ирештереү етәлер. Толомдарындағы бөртөктәренә һыу ирешмәһә лә ярайҙыр, сөнки ҡатын-ҡыҙ өсөн сәс бер зиннәттер. Уларға сәстәрен ҡыҫҡартыу дөрөҫ түгелдер.

## Ғөсөлдөң сәбәптәре.

Ғөсөл ҡылыуҙы фарыз ҡыла торған сәбәптәр 3-төр: 1)жөнөб булыу (еүешлек килеү, яҡынлыҡ ҡылыу, ихтиләм булыу;) 2) хәез тамам булыу; 3) нифаз тамам булыу.

Ғөсөлһөҙ кешенең тәненең һәр ере арыуһыҙ булалыр. Жөнөб кешегә Ҡөрьән уҡыу һәм Мөсхәф шәрифте тотоу, мәсеткә инеү мәкруһтыр(тейешле түгел). Шуның өсөн уға мөмкин ҡәҙәр тиҙ ғөсөл ҡылып, таҙарыныу фарыз булыр. Әммә тәһәрәтһеҙ кешегә Мөсхәф шәрифте тотоу мәкруһ булһа ла, Ҡөрьән уҡыу мәкруһ түгелдер. Доғалар уҡыу, сәләм биреү һәм тәсбих әйтеү жөнөб кешегә лә, тәһәрәтһеҙ кешегә лә мәкруһ түгелдер.

## Ҡибла.

Намаҙҙы ҡибла тарафына ҡарап уҡыу фарыздыр. Ҡибла ҡайһы тарафта икәнен белә тороп, намаҙҙы башҡа тарафҡа таба ҡарап уҡыу - һис дөрөҫ булмаҫ. Башҡортостанда был көньяҡ тарафындаҙыр. Әһле Исламдың ҡиблаһы— Ғәрәбстанда Мәккәи-Мөкәррәмә ҡалаһында, Кәғбә исемле мөбәрәк йорттоң урынылыр.

## Намаҙ ваҡыттары үә рәкәғәтенең һаны.

Иртәнге намаҙ - таң яҡтылығы йәйелгәндән башлап ҡояш сыға башлағансылыр.

2 рәкәғәт сөннәт;

2 рәкәғәт фарыз;

Өйлә намаҙы ваҡыты - ҡояш төш ваҡыты турыһындан ауышҡандан башлап, икенде ваҡытына ҡәҙәрҙер.

4 рәкәғәт сөннәт;

4 рәкәғәт фарыз;

2 рәкәғәт сөннәт.

Икенде намаҙы - һәр нәмәнең күләгәһе төш ваҡытындағы күләгәһенән башҡа үҙе оҙонлоғо ҡәҙәр ике өлөш оҙайғандан башлап, ҡояш тамам батып бөткәнселер.

4 рәкәғәт фарыз уҡыла.

Аҡшам намаҙы - ҡояш батып тамам күмелгәндән башлап, шәфәҡ ҡыҙыллығы бөткәнселер.

3 рәкәғәт фарыз;

2 рәкәғәт сөннәт.

Йәстү намаҙы - шәфәҡ ҡыҙыллығы бөткәндән башлап, таң яҡтылығы йәйелгәнселер.

4 рәкәғәт фарыз;

2 рәкәғәт сөннәт;

3 рәкәғәт витр намаҙы.

## Аҙан һәм ҡәмәт.

Биш ваҡыт фарыз намаҙҙарының һәм Йоманың ваҡыты ингәс, аҙан уҡыу һәм фарыздарын уҡыр алдынан ғына ҡәмәт уҡыу сөннәттер. Ҡатын-ҡыҙға аҙан әйтеү дөрөҫ түгел.

Аҙан һүҙҙәре ошоларҙыр:

4 тапҡыр: "Аллааһү әкбәр" ,-тип әйтелә.

2 тапҡыр: "Әшһәду әлләә иләәһә илләллааһ".

2 тапҡыр: "Әшһәду әннә Мүхәммәдәр - расүүлүллааһ".

2 тапҡыр: "Хәййә ғәләс - саләәһ".

2 тапҡыр: "Хәййә ғәләл-фәләәх".

Тағы 2 тапкыр: "Аллааһү әкбәр".

1 тапкыр: "*Ләә иләәһә илләллааһ*".

**Тәнбиһ:** Иртә намаҙының аҙағында "Хәййә ғәләл-фәләәх" тигәндән һуң, ике тапкыр: "Әссаләәтү хайрум минән-нәүм", - тип әйтелер.

Аҙан әйтеп бөтөргәндән һуң, аҙан доғаһы уҡыла: "Аллааһүммә Раббә һәәҙиһид - дәғүәтит-тәәммәти үәс-саләәтил ҡааьимәһ. Әәти Мүхәммәдәнил үәсиләтә үәл фадыыләтә үәд-дәраджәтәл ғәлийәтәр-раафиғәһ. Үәбғәҫһү мәкаамән мәхмүүдәнил-ләҙии үәғәттәһү үәрзуҡнәә шәфәәғәтәһү йәүмәл ҡийәәмәһ. Иннәкә ләә түхлифүл мииғәәд.

Аҙан әйтеп доға ҡылғас, намаҙға керешәбеҙ.

## Намаҙ ниәтләү.

Намаҙға керешкәндә уҡыласаҡ намаҙҙы күңел менән ниәт ҡылыу фарыздыр. Тел менән ҡайһы намаҙ икәнен атап, ниәт ҡылыу мөстәхәбтер.

Имамға ойоған кешегә ойоуҙо ла ниәт ҡылыу тейешле булыр.

Биш ваҡыт намаҙға ошо рәүешсә ниәт ҡылыныр:" Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаанир-раджиим. Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим", - тип намаҙлыҡка баҫабыҙ. Унан һуң "әстәғфируллааһә, әстәғфируллааһә, әстәғфируллаһә үә әтүүбү иләйһи", - тип әйтәбеҙ. Намаҙлыҡка баҫкас бары тик сәждә урынына ғына ҡарайбыҙ.

## Иртәнге намаҙ.

Бисмилләәһир - рахмәәнир - рахиим.

Иләһи ниәт ҡылдым иртәнге намаҙҙың 2 рәкәғәт сөннәтен үтәмәккә йүнәлдем ҡибла тарафына: Хәлисән лилләәһи

тәгәәлә, Аллаһү әкбәр, - тип ҡулдарыбыҙҙы иң өҫтөнә күтәрәбеҙ үә ирҙәр ҡолаҡ йомшаҡтарына баш бармағын тейҙерәләр (ҡатын-ҡыҙҙар елкә менән тигеҙ итеп ҡулдарын кәтәрә). (1-се һүрәт)

Был ваҡытта устарыбыҙ тура ҡиблаға ҡарарға тейеш.

"Аллааһү әкбәр" тип бөтөргәс тә, ҡатын-ҡыҙҙар ҡулдарын күкрәккә бағлайҙар, ә ирҙәр ҡулдарын кендек өҫтөнә ҡуялар. (2-се һүрәт)

Тәкбир әйтеп ҡулдарҙы бағлағас, çәнә укыла:

Сүбхәәнәкәллааһүммә үә бихәмдикә үә тәбәәракәсмүкә үә тәғәәлә джәддүкә үә ләә иләәһә ғайрук.

Унан «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе) укыла.

Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаанир-раджиим.

Бисмилләәһир - рахмәәнир – рахиим.

«Әлхәмдү лилләәһи Раббил ғәәләмиин. Әррахмәәнир-рахиим. Мәәлики йәүмид-диин. Иййәәкә нәғбүду үә иййәәкә нәстәғиин. Иһдинәс-сыраатал-мүстәкыым. Сыраатал-ләҙиинә әнғәмтә ғәләйһим Ғайрил-мәғдууби ғәләйһим үәләд-даааааллиин. Әәмиин.

Тағы берәй сүрә укыла, мәçәлән:

Иннәәәә әғтайнәәкәл-кәүçәр. Фәсалли лираббикә үәнхәр. Иннә шәәниьәкә һүүәл-әбтәр", тип укыйбыҙ ҙа "Аллааһү әкбәр",- тип рукуғка китәбеҙ, йәғни ярым бөгөләбеҙ. Рукуғта ҡулларыңды тубыктарыңа ҡуяһың да, (ҡатын-ҡыҙҙың тубығы бер аҙ алға бөгөлә) өс тапкыр: "Сүбхәәнә Раббиил-ғаҙыйм",- тип әйтелә. (Ирҙәрҙең тубыктары бөгөлмәй). (3-сө һүрәт)

Унан һуң " Сәмиғәллааһү лимән хәмидәһ" тип әйтә-әйтә рукуғтан тораһың (4-се һүрәт). Һуңынан " Раббәнәә ләкәл-хәмде" тип әйтергә. "Аллааһү әкбәр" тип сәждәгә китәһең (5-се һүрәт).Сәждәгә киткәндә башта тубыктар, унан ҡуллар, танау һәм маңлай намаҙлыҡка тейә. Сәждәлә: бармаҡтар

бергә, ҡулдар йөҙҙөң як-яғына, аяҡтар бер-береһенә тейешле һәм аяҡ остары ерҙән айырылмай. Ҡатын-ҡыҙҙар сәждәлә мөмкин ҡәҙәр йыйналған булырға тейеш. Ирҙәрҙең ҡултыҡтары асыҡ, терһәктәре ергә теймәй. Ирҙәрҙең һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың аяҡ-бармаҡтары ҡиблаға ҡарап тора.

Сәждәлә 3 тапҡыр: " Сүбхәәнә Раббиил-әғлә", - тип әйтәбеҙ ҙә, "Аллааһү әкбәр", - тип тороп ултырабыҙ (6-сы һүрәт). Был ултырыу жәлсә тип атала. Аҙ ғына ултырып алғас, ҡабат сәждәгә китәбеҙ(7-се һүрәт). Сәждәлә 3 тапҡыр: " Сүбхәәнә Раббиил-әғлә", - тип әйтәбеҙ ҙә, "Аллааһү әкбәр" тип тороп баҫабыҙ(2-се һүрәт).

Быларҙы үтәп бөтөргәс, бер рәкәғәт намаҙыбыҙ тамам була (һәр рәкәғәттә шулай уҡ башҡарыла).

2-се рәкәғәтте үтәгәндә ҡулдарыбыҙҙы күкрәктәребеҙгә бағлап (ирҙәрҙеке кендек өҫтөндә), бисмилләһ әйтеп «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе) уҡыйбыҙ (2-се һүрәт).

Бисмилләәһир - рахмәәнир - рахиим.

«Әлхәмдү лилләәһи Раббил ғәәләмиин. Әррахмәәнир-рахиим. Мәәлики йәүмид-диин. Иййәәкә нәғбүдү үә иййәәкә нәстәғиин. Иһдинәс-сыраатал-мүстәҡыым. Сыраатәл-ләҙиинә әнғәмтә ғәләйһим ғайрил-мәғдууби ғәләйһим үәләд-даааллиин.Әәмиин.

Унан һуң "Ҡуль-һүәллаһ"-ты ("Ихлас" сүрәһен) уҡыйбыҙ.

"Ҡуль һүүәллааһү әхәд. Аллааһүс-самәд. Ләм йәлиде үә ләм йүүләде. Үә ләм йәкүлләәһүү күфүүән әхәде",- тигәс, "Аллааһү әкбәр" тип рукуғҡа китәбеҙ. Рукуғта 3 тапҡыр "Сүбхәәнә Раббил- ғаҙыйм",- тип әйтәһең (3-сө һүрәт).

Унан һуң "Сәмиғәллааһү лимән хәмидәһ",- тип әйтә-әйтә рукуғтан тораһың (4-се һүрәт). Һуңынан "Раббәнә ләкәл-

хәмд",- тип әйтәһең дә, "Аллааһү әкбәр",- тип сәждәгә китәһең (5-се һүрәт).

Сәждәлә 3 тапкыр: "Сүбхәәнә Раббил-әғлә",- тип әйтәбеҙ ҙә, "Аллааһү әкбәр",- тип «Әттәхиәт» доғаһына ултырабыҙ(8-се һүрәт).

Әттәхиййәәтү лилләәһи үәс-саләүәәтү үәт-таййибәт. Әссәләәмү ғәләйкә әййүһән-нәбиййү үә рахмәтуллааһи үә бәракәәтүһ. Әссәләәмү ғәләйнәә үә ғәләә ғибәәдилләәһис-саалихиин. Әшһәду әлләә иләәһә илләллааһү үә әшһәду әннә Мүхәммәдән ғәбдүһүү үә расүүлүһ.

Һуңынан "Салауат" доғаһы әйтелә: Аллааһүммә салли ғәләә Мүхәммәдин үә ғәләә әәли Мүхәммәд. Кәмәә салләйтә ғәләә Ибрааһиимә үә ғәләә әәли Ибрааһиимә иннәкә хәмиидүм мәджиид. Аллааһүммә бәәрик ғәләә Мүхәммәдин үә ғәләә әәли Мүхәммәд. Кәмәә бәәрактә ғәләә Ибрааһиимә үә ғәләә әәли Ибрааһиимә иннәкә хәмиидүм мәджиид.

Унан һуң: "Раббәнәә әәтинә фид-дүнйәә хәсәнәтәү үә фил әәхыйрати хәсәнәтәү үә ҡынәә ғәҙәәбән-нәәр",- тип уҡып, "Әссәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтуллааһ",- тип тәүҙә уң яҡка, унан һул яҡка сәләм бирәбеҙ (9-сы һүрәт).

Сәләм биргәндән һуң ҡулдарыбыҙҙы күтәреп, 3 тапкыр: "Әстәғфируллааһ",- тип әйтеп, "Аллааһүммә әнтәс-сәләәмү үә минкәс-сәләәмү тәбәәрактә йәә ҙәл-джәләәли үәл икраам",- тип доға ҡылабыҙ.

Быларҙы үтәп бөтөргәс, беҙҙең иртәнге намаҙыбыҙҙың 2 рәкәғәт сөннәт намаҙы үтәлгән була.

**<u>Тәнбиһ:</u>** Бөтөн 2 рәкәғәтле намаҙҙар ҙа шул рәүештә башкарыла. Иртәнге намаҙҙың 2 рәкәғәт фарызы да тап шулай уҡ башкарыла, тик фарызды башлауҙан алда ирҙәр ҡамәт төшөрә. Ҡатын-ҡыҙҙар айырым уҡығанда ҡамәт төшөрөлмәй.

Ҡамәт тә аҙан кеүектер. Тик ҡамәттә "Хәййә ғәләл фәләәх" тигәндән һуң, 2 тапкыр "Ҡад ҡаамәтис-саләәһ",- тип әйтеләр.

Ҡамәт укыусы "Хәййә ғәләс-саләәһ" тигәндә намаҙ укыясаҡ кешеләргә урындарынан тороп, намаҙға ниәт ҡылыу һәм "Ҡад ҡаамәтис-саләәһ" тигәндә тәкбир әйтеп, намаҙға керешеү мөстәхәбтер.

## 4 рәкәғәтле намаҙ

2 рәәғәт намаҙҙы укып бөткәс "Әттәхиәт" укыла, ләкин "Салауат" укылмай. Һуңынан "Аллаһү әкбәр" тип тороп баҫабыҙ һәм (тәүҙә йөрәтелеп киткән һымаҡ) тағы ла 2 рәкәғәт намаҙ укыйбыҙ. <u>**Тәнбиһ:**</u> 4 рәкәғәтле фарыз намаҙы булһа 3-сө, 4-се рәкәғәттәрҙә ҡыҫка сүрә ҡушылмай, әгәр сөннәт намаҙы булһа ҡыҫка сүрә ҡушыла (йәғни 3-сө- 4-се рәкәғәттәр 1-се, 2-се рәкәғәтле намаҙҙағы һымаҡ була). 4-се рәкәғәтте укып бөткәс ҡәғдәгә ултырабыҙ (8-се һүрәт) һәм "Әттәхиәт" доғаһын үә "Салауат" доғаһын, һуңынан "Раббәнә" доғаһын укып тәүҙә уң яҡка һуңынан һул яҡка "Әссәләмү ғәләйкүм" тип сәләм бирәбеҙ.

## Намаҙ тәсбихе

Намаҙҙы тамамлағас, "Сүбхәәнәллааһи үәлхәмдү лилләәһи үә ләә иләәһә илләллааһү үәллааһү әкбәр. Ләә хәүлә үә ләә ҡүүәтә илләә билләәһил ғәлиййил ғаҙыйм. Мәә шәә Аллааһү кәәнә үә мәә ләм йәшәъ ләм йәкүүн", тибеҙ ҙә, бисмилләһ әйтеп "Аятүл-Күрси"не укыйбыҙ.

Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаанир-раджиим.

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Аллааһү ләә иләәһә илләә һүүәл-хәййүл ҡайййүм. Ләә тәьхүҙүһүү синәтү-үә ләә нәүүм. Ләһүү мәә фис-сәмәәүәәти үә мәә фил-әрд. Мәнң ҙәлләҙии йәшфәғү ғиңдәһүү илләә бииҙниһ. Йәғләмү мәә бәйнә әйдииһим үә мәә халфәһүм үә

ләә йухытүүнә бишәйьим-мин ғилмиһии илләә бимәә шәә. Үәсиғә күрсиййүһүс-сәмәәүәәти үәл-әрд. Үә ләә йәьүдүһүү хифҙуһүмәә үә һүүәл-ғәлиййүл ғаҙыйм.

"Бисмиләәһир-рахмәәнир-рахиим",- тибеҙ ҙә, 33 тапҡыр "Сүбхәәнәллааһ", тип әйтәбеҙ. Тағын: "Бисмиләәһир-рахмәәнир-рахиим",- тип, 33 тапҡыр "«Әлхәмдү лилләһ" тибеҙ. Йәнә "Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим" тип, 33 тапҡыр "Аллааһү әкбәр",- тибеҙ. Йөҙөнсөһөн: "Ләә иләәһә илләллааһү үәллааһү әкбәр. Ләә хәүлә үә ләә ҡуүүәтә илләә билләәһил ғәлиййил ғаҙыйм",- тип тамамлайбыҙ.

Һуңынан тәсбих доғаһын ҡылабыҙ һәм Ҡөрьән уҡып мәрхүм-мәрхүмәләрҙең рухына доғаларыбыҙҙы бағышлап ҡуябыҙ



## Тәсбих доғаһы

Бисмиләһир-рахмәнир-рахим.

Аллааһүммә тәкаббәл миннәә саләәтәнәә үә сыйәәмәнәә үә ҡыйәәмәнәә үә ҡыйраьәтәнәә үә рукүүғәнәә үә сүджүүдәнәә үә ҡуғүүдәнәә үә тәсбиихәнәә үә тәһлииләнәә үә тәхашшуғәнәә үә тәддарруғәнәә. Аллааһүммә тәммим тәксыранәә үә тәкаббәл тәмәәмәнәә үәстәджиб дүғәәʼәнәә үәғфир әхйәәнәә үәрхәм мәүтәәнәә йәә мәүләәнәә. Аллааһүммәхфәҙнәә йәә хаафиҙ мин джәмииғил-бәләәәйәә үәл-әмраад. Аллааһүммә тәкаббәл миннәә һәәҙиһис-саләәтәл-фәрда мәғәс-сүннәти мәғә джәмииғи нүҡсаанәәтиһәә бифадликә үә кәраамикә үә ләә тәдрибү биһәә вүджүүһәнәә йәә иләәһәл ғәәләмиинә үә йәә хайран-нәәсыриин. Тәүәффәнәә мүслимиинәә үә әлхиҡнәә бис-саалихиин. Үә салләллааһү тәғәәләә ғәләә хайри халҡыһи Мүхәммәдин үә ғәләә әәлиһии үә әсхәәбиһии әджмәғиин.

Үәлхәмдү лилләәһи Раббил ғәәләмиин.

Берәй сүрә йәки 2-3 аят укып, әрүәхтәргә һәм үҙебеҙ өсөн дә доға ҡылабыҙ.

## Әрүәхтәргә доға ҡылыу

Бисмиләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Иләһи бағышланым Раббым, Үҙеңдең ризалығың өсөн, ошо укылыр. Кәләм шәрифтәрҙә булған әжер-сауаптарҙы хаталыҡтарын, кәмселектәрен ғәфү иткән хәлдә киң рәхмәтең менән ҡабул итһәң ине.

Ошо укылған Кәләм шәрифтәрҙә булған әжер-сауаптарҙы һанап доға ҡылабыҙ:

— бөтөн ғәләмгә рәхмәт өсөн ебәрелгән беҙҙең пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд Мостафа салләллаһу ғәләйһис-сәләмдең рух-шәрифенә;

— һәм дә уның балалары рухтары шәрифтәренә ирештерһәң ине;

— һәм дә атабыҙ Әҙәм менән әсәбеҙ Һауа радыйаллаһү ғәнһүләрҙең рухтары шәрифтәренә ирештерһәң ине;

— һәм дә атабыҙ Әҙәм ғәләйһис-сәләмдән алып, хәҙерге көнгә тиклем ер йөҙөнә килеп киткән бөтөн Пәйғәмбәрҙәребеҙҙең, бөтөн ғибәҙәт ҡылыусыларыбыҙҙың, бөтөн заһидтарыбыҙҙың, бөтөн уҡытыусыларыбыҙҙың һәм бөтөн өләсәй-олатайҙарыбыҙҙың рухтары шәрифтәренә ирештерһәң ине;

— һәм дә ғәзиз әсәйемдең, ғәзиз атайымдың рухтары шәрифтәренә ирештер;

— һәм дә ҡәҙерле ҡыҙ туғандарымдың, ҡәҙерле ир туғандарымдың... рухтары шәрифтәренә ирештерһәң ине;

— һәм дә өҫтәребеҙҙә хаҡтары булған, ғәйбәттәренә төшкән әрүәхтәрҙең рухтары шәрифтәренә ирештерһәң ине.

Раббым, рухтарын шат ҡылып, гонаһтарын ярлыҡаһаң ине. Әмин.

Раббым, ошо уҡылған Кәләм шәрифтең хаҡы хөрмәтенә гонаһтарыбыҙҙы ғәфү ит, донъялыҡ, әхирәт өсөн булған теләктәребеҙгә ирешергә насиб ит.

Раббым, донъяла йәшәгәндә кешеләргә мохтажлыҡтарыбыҙҙы төшөрмә. Тәндәребеҙгә сәләмәтлек, йәндәребеҙгә тыныслыҡ бир. Йөрәк күҙҙәребеҙҙе һәм маңлай күҙҙәребеҙҙе яҡтырт. Баштарыбыҙға зирәк зиһен, үткер фекер, камил аҡыл, күркәм холоҡ, йомшаҡлыҡ менән ғәмәл, тулы иман бир. Халҡыбыҙға тәүфиҡ-истиҡамәтендә, илебеҙгә тыныслыҡ, түрәләребеҙгә миһырбанлыҡ, байҙарыбыҙға йомартлыҡ, муллаларыбыҙға ғәйрәт үә истиҡамәт, балаларыбыҙға һиҙәйәт, ауырыуҙарыбыҙға хәерле шифаларынды насип әйләһәң ине. Донъяла йәшәгәндә

ғәмәл-ғибәҙәт ҡылып, дөрөҫ йәшәп, үлем ваҡыттарыбыҙ еткәндә әҙ ауырыу, анһат үлем бир. Йән биргән ваҡыттарыбыҙҙа йәннәтеңде күреп анһат ҡына йәнебеҙҙе тапшырырға насиб ит. Әмин.

Ҡәбергә барып ингәндә рәхмәт фәрештәләре ҡаршылаһа ине. Һорауҙарыбыҙ еңел булһа ине. Ҡиәмәткәсә Аллаһтың йәннәтен өмөт итеп, юғары йәннәттәренә тоташырға насип итһә ине. Әмин.

Раббәнәә әәтинә фиддүнйәә хәсәнәтәү үә фил әәхыйрати хәсәнәтәү үә ҡыйнәә ғәҙәәбән-нәәр. Бирахмәтикә йәә әрхәәмәр-раахимиин.

Был доғаларҙы , ваҡытың булһа, һәр бер намаҙ артынан да уҡырға ярай.

## Өйлә намаҙы

<u>4 рәкәғәт сөннәт:</u>

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» доғаһы, «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүҫәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Ҡульһүаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Шунан һуң ярты "«Әттәхиәт» доғаһы"-те уҡыйбыҙ ҙа "үә расүүлүһ" тигәс яңынан тороп баҫабыҙ.

3-сө рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), бер сүрә уҡыла.

4-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), бер сүрә уҡыла.

Уҡып бөтөргәс, бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыла

<u>4 рәкәғәт фарыз:</u>

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» догаһы, «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүҫәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Ҡульһүаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Шунан һуң ярты «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ ҙа "үә расүүлүһ"тигәнсе яңынан тороп баҫабыҙ.

3-сө рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе) уҡыла.

4-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе) уҡыла.

Ошонан һуң бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыла.

<u>2 рәкәғәт сөннәт:</u>

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» догаһы, «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүҫәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Ҡульһүаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

Шуның менән өйлә намаҙы тамам.

## Икенде намаҙы.

<u>4 рәкәғәт фарыз:</u>

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» догаһы, «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүҫәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Ҡульһүаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Ярты «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ ҙа "үә расүүлүһ"тигәнсе яңынан тороп баҫабыҙ.

3-сө һәм 4-се рәкәғәттәрҙә берәй «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе) уҡыла.

Бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

## Аҡшам намаҙы.

<u>3 рәкәғәт фарыз:</u>

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» догаһы, «Әлхәм» («Фәтихә»

сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүсәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе), "Ҡульһуаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Ярты «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

3-сө рәкәғәт «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе) уҡыла.

Бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

2 рәкәғәт сөннәт:

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» доғаһы, «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүсәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе), "Ҡульһуаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

## Йәстү намаҙы.

4 рәкәғәт фарыз:

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» доғаһы, «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүсәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе), "Ҡульһуаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Ярты «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

3-сө рәкәғәттә «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе) уҡыла.

4-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе) уҡыла.

Бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

2 рәкәғәт сөннәт:

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» доғаһы, «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүсәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фатиха» сүрәһе), "Ҡульһуаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

3 рәкәғәт витр намаҙы:

1-се рәкәғәттә «Сүбхәнәкә» доғаһы, «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Иннә әғтайнә" ("Кәүҫәр" сүрәһе) уҡыла.

2-се рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), "Ҡульһүаллаһ" ("Ихлас" сүрәһе) уҡыла.

Ярты «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

3-сө рәкәғәттә «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе), шунан һуң Нәс йәки Фәләҡ сүрәһен уҡып, күкрәк өҫтөнә бағлаған ҡулдарыбыҙҙы кире төшөрөп, яңынан "Аллааһү әкбәр" тип яңынан кендек турыһына бағлап "Ҡунут" доғаһын уҡыйбыҙ.

## "Ҡунут" доғаһы.

"Аллааһүммә иннәә нәстәғиинүкә үә нәстәғфирукә үә нуъминү бикә үә нәтәүәккәлү ғәләйкә үә нуҫнии ғәләйкәл-хайра нәшкүрүкә үә ләә нәкфүрукә үә нәхләғу үә нәтрукә мән йәфджүрук. Аллааһүммә иййәәкә нәғбүду үә ләкә нүсаллии үә нәсджүду үә иләйкә нәсғәә үә нәхфиду рахмәтәкә үә нәхшәә ғәҙәәбәкә иннә гәҙәәбәкә бил-күффәәри мүлхиҡ."

Бөтөн «Әттәхиәт» доғаһы уҡыйбыҙ.

Намаҙ тамам булғандан һуң Сүбхәнәллаһи, Аятөл Көрси уҡып, тәсбих тартаһың, тәсбих доғаһы уҡып доға ҡылаһың.

## Намаҙ эсендә уҡый торған зикерҙәрҙең һәм доғаларҙың мәғәнәләре

**Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаанир-раджиим.**

Мәғәнәһе: "Рәхмәттән һөрөлгән шайтандың яуызлығындан Аллаһ Тәғәләгә һыйынам".

**Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.**

Мәғәнәһе: "Донъяла ла, әхирәттә лә рәхмәт ҡылыусы Аллаһ Тәғәләнең исеме менән башлайым мин был эште".

**Аллааһү әкбәр.**

Мәғәнәһе: "Аллаһ Тәғәлә һәр нәмәнән олораҡтыр".

**Әшһәду әлләә иләәһә илләллааһ.**

Мәғәнәһе: "Күңелем менән ышанам, бер Аллаһ Тәғәләнән башҡа һис Иләһ юҡтыр".

**Әшһәду әннә Мүхәммәдәр-расүлүллаһ.**

Мәғәнәһе: "Күңелем менән ышанам, Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм - Аллаһ Тәғәләнең илсеһелер".

**Хәййә ғәләс – саләәһ.**

Мәғәнәһе: "Ашығығыҙ намаҙға".

**Хәййә ғәләл- фәләәх.**

Мәғәнәһе: "Ашығығыҙ ғазаптан ҡотолорға".

**Ләә иләәһә илләллааһ.**

Мәғәнәһе: "Бер Аллаһ Тәғәләнән башҡа һис Иләһ юҡтыр".

**Әссаләәтү хайрум минән нәүм.**

Мәғәнәһе: "Намаҙ уҡыу йоҡонан яҡшыраҡ".

**Ҡад ҡаамәтис-саләәһ.**

Мәғәнәһе: "Намаҙ ваҡыты етте".

## Аҙан доғаһы.

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Аллааһүммә Раббә һәәҙиһид-дәғүәтит-тәәммәти үәссаләәтил-ҡааʼимәһ. Әәти Мүхәммәдәнил үәсииләтә үәл-фадыыләтә үәд-дәраджәтәл-ғәлиәтәр-раафиғәһ. Үәбғәҫһү мәҡаамән мәхмүүдәнилләҙии үәғәттәһү үәрзуҡнәә шәфәәғәтәһү йәүмәл-ҡийәәмәһ. Иннәкә ләә түхлифүл-мииғәәд.

Мәғәнәhе: "Эй, ошо камил аҙандың вакыты ингән намаҙҙың хужаhы булыусы Аллаh, Мөхәммәд ғәләйhиссәләмгә ярҙамсылыкты һәм артыклыкты, юғары һәм өҫтөн булған дәрәжәне бир. Уны Үҙең вәғәҙә кылған мактаулы урынға ирештер. Кыямәт көнөндә беҙгә уның шәфәғәтен насип ит. Һин вәғәҙәңдә һис хилафлыгк кылмайһың".

## Çәнә.

Бисмилләәhир-рахмәнир-рахим.

Сүбхәәнәкәллааhүммә үә бихәмдикә үә тәбәәракәсмүкә үә тәғәәлә джәддүкә үә ләә иләәhә ғайрук.

Мәғәнәhе: "Эй Аллаh,Һинең мактаулығыңды беләм. Һинең исемең мөбәрәктер һәм дәрәжәң ололор. Һинән башкка һис Иләh юктыр".

## «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәhе) .

Бисмилләәhир-рахмәәнир-рахиим.

Әлхәмдү лилләәhи Раббил ғәәләмиин. Әррахмәәнир-рахиим. Мәәлики йәүмид-диин. Иййәәкә нәғбүдү үә иййәәкә нәстәғиин. Иhдинәс-сыраатал-мүстәкыым. Сыраталләҙиинә әнғәмтә ғәләйhим ғайрил-мәғдууби ғәләйhим үәләд-дааааллиин. Әәмиин.

Мәғәнәhе: "Һәр мактаулылык бөтөн ғәләмде тәрбиә кылыусы, донъяла ла, әхирәттә лә рәхмәт кылыусы һәм Кыямәт көнөнөң хужаhы булыусы Аллаh Тәғәләгә хастыр. Эй Раббыбыҙ, беҙ Һиңә генә ғибәҙәт кылыбыҙ һәм Һинән генә ярҙам hорайбыҙ. Беҙҙе тура юлдан алып бар - ул юл Һин изге ниғмәт биргәндәрҙең юлынан булhын. Асыуланған һәм аҙашкан кешеләрҙең юлынан булмаhын. Әмин. Эй Раббым, доғамды кабул ит".

## Иннә әғтайнә (Кәүҫәр сүрәһе)

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Иннәәә әғтайнәәкәл-кәүҫәр. Фәсалли лираббикә үәнхәр. Иннә шәәниьәкә һүүәл-әбтәр.

Мәғәнәһе: "Рәхимле һәм изгелекле Аллаһ исеме менән, беҙ һиңә кәүҫәр бирҙек. Һин дә Раббың өсөн намаҙ ҡыл һәм ҡорбан сал. Иманһыҙҙар һинән көнләшеп нәфрәтләнә бирһендәр".

**Сүбхәәнә Раббил- ғаҙыйм.**

Мәғәнәһе: "Оло булған Раббым бөтөн кәмселектәрҙән таҙа".

**Сәмиғәллааһү лимән хәмидәһ.**

Мәғәнәһе: "Аллаһ Тәғәлә Үҙен маҡтаған кешенең маҡтауын ишетәлер".

**Раббәнәә ләкәл-хәмд.**

Мәғәнәһе: "Эй Раббыбыҙ, һәр маҡтау Һиңә генә ".

**Сүбхәәнә Раббил-әғлә.**

Мәғәнәһе: "Бөйөк Раббым һәр кәмселектән таҙа".

## "Ҡулһүаллаһ" – "Ихлас" сүрәһе.

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Ҡуль һүүәллааһү әхәде. Аллааһүс-самәде. Ләм йәлиде үә ләм йүүләде. Үә ләм йәкүлләәһүү күфүүән әхәде

Мәғәнәһе: "Әйт, эй Мөхәммәд:" Аллаһ Тәғәлә бер. Ул камил хужалыр. Ул һис кемде тыуҙырманы һәм үҙе лә һис кемдән тыуманы. Уға тиң булыусы юктыр",- тип.

## «Әттәхиәт» доғаһы.

Бисмилләәһир-рахмәнир-рахим.

«Әттәхиәтү лилләәһи үәс-саләүәәтү үәт-таййибәәтү

эссэлээму ғэлэйкэ эййүһэн-нэбиййү үэ рахмэтүллааһи үэ бэракээтүһ. Эссэлээму ғэлэйнээ үэ ғэлээ ғибээдил-лээһис-саалихиин. Эшһэду эллээ илээһэ иллэллааһу үэ эшһэду эннэ Мүхэммэдэн ғэбдүһүү үэ расүүлүһ.

## Салават доғаһы

Аллааһүммэ салли ғэлээ Мүхэммэдин үэ ғэлээ ээли Мүхэммэд. Кэмээ саллэйтэ ғэлээ Ибрааһиимэ үэ ғэлээ ээли Ибрааһиимэ иннэкэ хэмиидүн мэджиид. Аллааһүммэ бээрик ғэлээ Мүхэммэдин үэ ғэлээ ээли Мүхэммэд. Кэмээ бээрактэ ғэлээ Ибрааһиимэ үэ ғэлээ ээли Ибрааһиимэ иннэкэ хэмиидүн мэджиид.

Мэғэнэһе: "Тел ғибэҙэттэре лэ, тэн ғибэҙэттэре лэ, мал ғибэҙэттэре лэ - һэр ҡайһыһы Аллаһ Тэғэлэ өсөндөр. Эй пэйғэмбэребеҙ, һиңэ Аллаһ Тэғэлэнең сэлэме, рэхмэте һэм бэрэкэте булһын. Сэлэм беҙгэ лэ һэм Аллаһ Тэғэлэнең һэр бер изге кешелэренэ лэ булһын.Күңелем менэн ышанам, Мөхэммэд ғэлэйһис-сэлэм Аллаһ Тэғэлэнең ҡоло һэм илсеһелер".

Эй Раббым, Мөмэммэд ғэлэйһис-сэлэмгэ һэм уның ҡэүеменэ рэхмэт ҡыл, Ибраһим ғэлэйһис-сэлэмгэ һэм уның ҡэүеменэ рэхмэт ҡылған кеүек. Ысынында, Һин маҡтаулы һэм олоһоңдор. Эй Раббым, Мөмэммэд ғэлэйһис-сэлэмгэ һэм уның ҡэүеменэ бэрэкэт бир,Ибраһим ғэлэйһис-сэлэмгэ һэм уның ҡэүеменэ бэрэкэт биргэн кеүек. Ысынында, Һин маҡтаулы һэм олоһоңдор".

## Раббэнэ доғаһы

Раббэнээ ээтинэ фиддүнйээ хэсэнэтэү-үэ фил ээхыйрати хэсэнэтэү-үэ ҡыйнээ ғэҙээбэн-нээр.

Мәғәнәһе: "Эй Раббыбыҙ, беҙгә донъяла ла, әхирәттә лә хәйерле ниғмәттәр бир. Һәм беҙҙе йәһәннәм утынан һаҡла".

## Сәләм доғаһы.

Аллааһүммә әнтәс-сәләәмү үә минкәс-сәләәмү тәбәәрактә йәә ҙәл-джәләәли үәл-икрам.

Мәғәнәһе: "Эй Раббым, Һин һәр бер бәләләрҙән һаҡлаусыһың. Һәр бер сәләмәтлек Һинән генәлер. Мөбәрәк булыусыһың, эй ололо̆к һәм хөрмәт эйәһе булыусы Аллаһ!"

## Намаҙҙан һуң уҡылған зикерҙәр.

**Сүбхәәнәллааһи үәлхәмдү лилләәһи үә ләә иләәһә илләллааһү үәллааһү әкбәр.**

Мәғәнәһе: "Аллаһ Тәғәлә кәмселектәрҙән таҙа булыусылыр. Бөтөн маҡтау Аллаһ Тәғәлә хастыр. Бер Аллаһ Тәғәләнән башҡа һис Иләһ юҡтыр. Аллаһ Тәғәлә һәр нәмәнән олораҡтыр".

***Ләә хәүлә үә ләә ҡувәтә илләә билләәһил ғәлиййил ғаҙыйм.***

Мәғәнәһе: "Аллаһтан башҡа һаҡлау һәм көс юҡтыр. Аллаһ Тәғәлә Бөйөк һәм Ғәзиз.

**Мәшәә Аллааһү кәәнә үә мәә ләм йәшәъ ләм йәкүн.**

Мәғәнәһе: "Аллаһ Тәғәлә теләгән нәмәләрҙең һәр ҡайһыһы булыр, Аллаһ Тәғәлә теләмәгән нәмә һис булмаҫ".

## Аятөл Көрси.

**Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаанир-раджиим.**

**Бисмилләәһир – рахмәәнир - рахиим.**

**Аллааһү ләә иләәһә илләә һүәл-хәййүл-ҡаййүүм. Ләә тәьхуҙүһүү синәтү-үә ләә нәүүм. Ләһүү мәә фиссәмәәүәәти үә мәә фил-әрд. Мәнң ҙәлләҙии йәшфәғү ғинңдәһүү илләә биьиҙниһ. Йәғләмү мәә бәйнә әйдииһим үә мәә халфәһүм үә ләә йүхыйтүүнә бишәйьим-мин ғилмиһии илләә бимәә шәә. Үәсиғә күрсиййүһүссәмәәүәәти үәл-әрд. Үә ләә йәьүүдүһүү хифҙуһүмәә үә һүәл-ғәлиййүл-ғаҙыйм.**

Мәғәнәһе: "Аллаһ - терек булыусы, ғәләмдең һәр бер эшен тәкбир ҡылыусы Ул. Бер Аллаһ Тәғәләнән башҡа һис Иләһ юҡтыр. Аллаһ Тәғәләлә йоҡомһорау һәм йоҡо булмаҫ. Ерҙә һәм Күктәрҙә булған нәмәләр һәр ҡайһыһы уныҡылыр. Кем Унын алдында шәфәғәт ҡылыусы? Һис кем шәфәғәт ҡылмаҫ, Унын рөхсәтенән башҡа. Ул Аллаһ Тәғәлә ерҙә һәм күктәрҙә булған һәр нәмәнең үҙҙәренән тәүҙә булған нәмәләрҙе лә, уларҙан һуң киләсәк нәмәләрҙе лә беләлер. Уларҙың береһе лә Аллаһ Тәғәлә белгән нәмәләрҙең һис ҡайһыһы белә алмаҫ, Аллаһ Тәғәлә теләгән ҡәҙәр генә белерҙәр. Унын көрсиһе (идаралығы, көсө) Күктәрҙе лә, Ерҙе лә һыйҙыралыр. Ер һәм күкте һаҡ тотоу Аллаһ Тәғәләгә һис ауырлыҡ ҡылмайҙыр. Аллаһ Тәғәлә аҡылдар һәм фәһемдәр (фекерҙәр) етмәүҙән пактыр (таҙалыр)".

## Тәсбих доғаһы.

**Аллааһүммә тәҡаббәл миннәә саләәтәнәә үә сыййәәмәнәә үә ҡыййәәмәнәә үә ҡыраьәәтәнәә үә рукүүғәнәә үә сүджүүдәнәә үә ҡуғүүдәнәә үә тәсбиихәнәә үә тәһлииләнәә үә тәхашшуғәнәә үә тәддарруғәнәә. Аллааһүммә тәммим тәҡсыранәә үә тәҡаббәл тәмәәмәнәә үәстәджиб дүғәә'әнәә үәғфир әхйәәнәә үәрхәм мәүтәәнәә**

**йәә мәүләәнәә. Аллааһүммәхфәҙнәә йәә хафиғ мин джәмииғил бәләәйәә үәл әмраад. Аллааһүммә тәкаббәл миннәә һәәҙиһис-саләәтәл-фәрда мәғәс-сүннәти мәғә джәмииғи нүксаанәәтиһәә бифадликә үә кәраамикә үә ләә тәдрибү биһәә вуджүүһәнәә йәә иләәһәл-ғәәләмиинә үә йәә хайран-нәәсыриин. Тәүәффәнәә мүслимиинәә үә әлхиҡнәә бис-саалихиин. Үә салләллааһү тәғәәләә ғәләә хайри халҡыһи Мүхәммәдин үә ғәләә әәлиһии үә әсхәәбиһии әджмәғиин.**

Мәғәнәһе: "Эй Раббым, беҙҙең намаҙыбыҙҙы, уруҙабыҙҙы, ҡиәмебеҙҙе, рөкүғыбыҙҙы, сәждәбеҙҙе, ҡәғдәбеҙҙе, тәсбихебеҙҙе, тәһлилебеҙҙе,тәүзиғыбыҙҙы һәм ялбарыуыбыҙҙы ҡабул ҡыл. Эй Раббым, кәмселектәребеҙҙе тамам ҡыл, тамам булған ғәмәлдәребеҙҙе ҡабул ҡыл һәм доғабыҙҙы ла ҡабул ҡыл. Эй Хужабыҙ, теректәрәбеҙҙе ярлыҡа үлгәндәребеҙгә рәхмәт ҡыл. Эй рәхмәт ҡылыусы Аллаһ, фазылың һәм кәрәмең менән беҙҙән ошо намаҙыбыҙҙы һәр бер кәмселектәре менән ҡабул ҡыл. Ул намаҙ менән беҙҙең йөҙөбөҙгә бәрмә. Эй бөтөн ғәләмдең Хаҡ Мәғбуде һәм ярҙам ҡылыусыларҙың камилырағы, беҙҙе мосолман хәлдә вафат ҡыл һәм беҙҙе изге кешеләргә тоташтыр.Аллаһ Тәғәлә халыҡтарының яҡшыһы Мөхәммәд ғәләйһис-сәләмгә һәм Уның әһле һәм сәхәбәләренә бөтәһенә лә рәхмәт ҡылһаң ине".

## Ҡунут доғаһы.

**Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.**

**Аллааһүммә иннәә нәстәғиинүкә үә нәстәғфирукә үә нуъминү бикә үә нәтәүәккәлү ғәләйкә үә нүҫнии ғәләйкәл хайра нәшкүрукә үә ләә нәкфүрукә үә нәхләғү үә нәтрукү мән йәфджүрук. Аллааһүммә иййәәкә нәғбүдү үә ләкә**

**нусаллии үә нәсджүду үә иләйкә нәсғәә үә нәхфиду рахмәтәкә үә нәхшәә ғәҙәәбәкә иннә ғәҙәәбәкә бил-күффәәри мүлхиҡ.**

Мәғәнәһе: "Эй Раббым, ысынында, беҙ һинән ярҙам һорайбыҙ. Һәм һинән гонаһтарыбыҙҙың ярлыгкауын һорайбыҙ. Һиңә иманабыҙ һәм тәүәккәл ҡылып һәр бер эштәребеҙҙе һиңә тапшырабыҙ. Һине маҡтайбыҙ. Һиңә шөкөр ҡылабыҙ, көфөрлөк ҡылмайбыҙ. Һиңә гонаһ ҡыла торған кешеләрҙе ташлайбыҙ.

Эй Раббым, беҙ һиңә генә ғибәҙәт ҡылабыҙ. Һинең өсөн генә намаҙ укыйбыҙ һәм сәждә ҡылыбыҙ, ғибәҙәт ҡылып, Һиңә яҡын булырға тырышабыҙ. Рәхмәтеңде өмөт итәбеҙ,ғазабыңдан ҡурҡабыҙ. Ысынында, һинең ғазабың иманһыҙ кешеләргә генә тейеүселер".

**Әссәләәмү ғәләйкүм үә рахмәтүллааһ.**

Мәғәнәһе: "Һеҙгә Аллаһ Тәғәләнең сәләме һәм рәхмәте булһын".

## Һүҙлек.

Ғабид — Ғибәҙәт итеүсе, ҡоллоҡ итеүсе.

Ғәнһү — Унан, уның тураһында.

Заһид— Донъя эштәренән ваз кисеп, ғибәҙәт менән генә шөғөлләнеүсе ир кеше.

Заһидә — Донъя эштәренән уаз кисеп, ғибәҙәт менән генә шөғөлләнеүсе ҡатын кеше.

Истинжә — Тәһәрәттән алда таҙаланыу.

Камил — 1.Етешкән, бәлиғ булған.
2.Тулы.
3. Иң һәйбәт, бер ниндәй кәмселекһеҙ.

Ҡалеб — 1. Йөрәк.
2. Үҙгәртеү, алмаштырыу.

Ҡәүем — Ырыу, нәҫел,ҡәбилә, халыҡ, милләт.

Кәләм — һүҙ, һөйләм.

Ләзем — Кәрәкле, тейешле.

Морад — Маҡсат.

Мәсех — 1.Ҡул менән һыйпау

2.Һөртөү.

Мәшәих — 1. Ишандар, дин ғалимдары.

2.Ҡарттар.

Мөҡаддәмә — Һүҙ башы, инеш һүҙ.

Мәкруһ — 1. Насар күрелгән, һөйкөмһөҙ.

2.Дин тарафынан киҫкен тыйылған, ләкин еңелдә ситкә ҡағылған эш.

3.Йәмһеҙ, ерәнгес.

Нифас — Бала тыуҙырыуғандан һуң килә торған ҡан.

Рәкәғәт — Намаҙҙың аяҡ-үрә тороу, эйелеү һәм башты ергә ҡуйыуҙы эсенә алған бер өлөшө.

Рукуғ — Эйелеп тороу , намаҙҙа тубыҡҡа таяныу.

Ҫәнә — Маҡтау, маҡтап әйтелгән һүҙ.

Сәхәбә — Мөхәммәд пәйғәмбәрҙең замандашы булып, уны күргән кешеләр.

Тәйәммүм — Һыу булмағанда ҡулдарҙы тупраҡҡа һуғып, "тәһәрәт" алыу.

Хилаф — Ҡаршы, ярамаған эш, кире, тиҫкәре.

Хәез — Күрем.

Әүләд —1. Бала.

2. Ул.

3.Тоҡом, нәҫел

# Йөкмәткеһе.

Мөкаддәмә..........1
Тәһәрәт..........2
Ғөсөл..........3
Ғөсөлдөң фарыздары..........3
Ғөсөлдөң сәбәптәре..........4
Ҡибла..........4
Намаҙ ваҡыттары үә рәкәғәтенең һаны..........4
Аҙан һәм ҡәмәт..........5
Намаҙ ниәтләү..........6
Иртәнге намаҙ..........6
4 рәкәғәтле намаҙ..........10
Намаҙ тәсбихе..........10
Тәсбих доғаһы..........12
Әрүәхтарға доға ҡылыу..........12
Өйлә намаҙы..........14
Икенде намаҙы..........15
Аҡшам намаҙы..........15
Йәстү намаҙы..........16
"Ҡунут" доғаһы..........17
Намаҙ эсендә уҡый торған зикерҙәрҙең һәм доғаларҙың мәғәнәләре..........17
Аҙан доғаһы..........18
Ҫәнә. «Әлхәм» («Фәтихә» сүрәһе)..........19
Иннә әғтайнә (Кәүҫәр сүрәһе), "Ҡулһүаллаһ" "Ихлас" сүрәһе, «Эттәхиәт» догаһы..........20
Салават доғаһы Раббәнә доғаһы..........21
Сәләм доғаһы, Намаҙҙан һуң уҡылған зикерҙәр, Аятөл Көрси..........22
Тәсбих доғаһы..........23
Ҡунут доғаһы..........24
Һүҙлек..........25

تعليم الصلاة مع الصور
باللغة الباشكيرية